Динебеҙ, еребеҙ

# РӘЖӘБ АЙЫ ТУРАҺЫНДА

***Рәжәб айының 27-се көнө, Миғраж - Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең күккә күтәрелеү кисе***

Был төндә ике ваҡиға була: пәйғәмбәребеҙ Мәккәнән Ҡотдосҡа килә һәм ете ҡат күккә аша.

Риүәйәткә ярашлы, төндә Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙгә Ябраил фәрештә килә һәм Ҡотдосҡа сәйәхәт ҡылырға тәҡдим итә. Ҡотдос ҡалаһының Әл-Аҡса мәсетендә ул Ибраһим, Муса, Ғайса пәйғәмбәрҙәр менән осрашып, улар менән намаҙ уҡый. Унан һуң Ябраил фәрештә менән күккә күтәрелә. Мөхәммәт үҙе әйткәнсә, күктең беренсе ҡатында Әҙәм уға күк ҡапҡаларын аса, икенсе ҡатында уға - Яхъя һәм Ғайса, өсөнсөһө - Йософ, дүртенсеһендә - Иҙрис, бишенсеһендә - Һарун, алтынсыһында - Муса, етенсеһендә Ибраһим пәйғәмбәрҙәр осрай. Күктең бөтә ҡаттарын үтеп, ул Аллаһы Тәғәлә менән менән һөйләшә. Был юлда пәйғәмбәргә ожмах менән тамуҡты күрһәтәләр, шулай уҡ ул Аллаһы Тәғәләнән, мосолмандар биш тапҡыр намаҙ уҡырға тейеш, тигән әмер ала. Мәккәгә кире ҡайтҡас, уның сәйәхәте бер мәл генә дауамында булғаны асыҡлана. Хатта юлға сығыр алдынан пәйғәмбәр ҡолатҡан һауыттан һыу ҙа ағып бөтмәгән була.

Ҡағиҙә булараҡ, Миғраж кисенә тиклем көн дауамында, ҡояш байығанға тиклем, мосолмандар ураҙа тота. Ҡояш байыу менән Миғраж төнө башлана. Был ваҡытты ғибәҙәт ҡылып үткәрәләр. Мосолмандар мәсеттә йыйылып, пәйғәмбәрҙең күккә күтәрелеү тарихын һөйләйҙәр, намаҙ, Ҡөрьән аяттары уҡыйҙар һәм һыйниғмәт әҙерләйҙәр.

# ЙӘШӘҮ МӘҒӘНӘҺЕ

***"Раббығыҙҙың ярлыҡауына һәм Йәннәткә ашығығыҙ! Йәннәттең киңлеге күктәр һәм ер ҡәҙәр һәм ул тәҡүәлеләргә әҙерләнгән…"***

(Ҡөрьән, "Ғимран ғаиләһе" сүрәһе, 3:133)

Тормош мәғәнәһе нимәлә? Ни өсөн Аллаһ күктәрҙе һәм ерҙе бар иткән? Мөхәммәт пәйғәмбәр (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙе нимәгә саҡырған? Сәхәбәләр нимәгә саҡырған? Тәбиғиндар,.. Нимә өсөн Бәҙер һуғышы була? Өхөд һуғышы? Бар донъя буйлап бөгөн бөйөк ғалимдар һәм ҡыйыу мөжәһиттәр беҙҙе нимәгә саҡыра?..

Беҙҙең әйтергә теләгәнебеҙ изге бер һүҙ тураһында. Был һүҙ яҙыуҙа ла, әйткәндә лә бик еңел, әммә Ҡиәмәт көнө үлсәүҙәрендә иң ауыр тартҡаны ул буласаҡ. Шул һүҙ өсөн Аллаһ күктәрҙе һәм ерҙе бар иткән. Иң яҡшы зикер ҙә - ул һүҙҙәр. Доға өсөн дә иң яҡшы һүҙҙәр - ул һүҙҙәр. Ошо һүҙҙәр аша беҙ Уға тағы ла нығыраҡ яҡынаябыҙ, иншәллаһ. Ошо һүҙҙәр менән беҙ Аллаһтан мәрхәмәтлелек, рәхимлелек һорайбыҙ. Ул һүҙҙәрҙе әйткән һайын Аллаһы Тәғәлә беҙҙән тағы ла нығыраҡ кәнәғәт була бара. Ниндәй һүҙҙәр улар?

ЛӘ ИЛӘҺӘ ИЛЛӘЛЛАҺ! Был иң бөйөк һүҙ! Иң ҡиммәтле һүҙҙәр. Мөхәммәт Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Мин һәм миңә тиклемге барлыҡ пәйғәмбәрҙәр әйткән иң яҡшы һүҙҙәр - Лә иләһә илләллаһ! Ошо һүҙҙәргә саҡырмаған бер пәйғәмбәр ҙә булмаған". Тап ошо һүҙ хаҡына күктәр һәм ерҙәр бар ителгән, кешелеккә изге китаптар төшөрөлгән, пәйғәмбәрҙәр ебәрелгән, ошо һүҙҙәр хаҡына Йәннәт һәм Йәһәннәм яратылған. Бар нәмә лә тик ошо бөйөк һүҙҙәр өсөн!

Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһиссәләм) үҙ улына биргән кәңәше: "Әй, улым, минең һиңә кәңәшем - ул "Лә иләһә илләллаһ". Сөнки, әгәр бер үлсәүгә ете күкте һалһаҡ, икенсе үлсәүгә "Лә иләһә илләллаһ"ты һалһаҡ, "Лә иләһә илләллаһ" ауырыраҡ тартыр".

ЛӘ ИЛӘҺӘ ИЛЛӘЛЛАҺ! Әгәр ошо һүҙҙәр беҙҙең ҡаныбыҙға һеңеп, йөрәктәребеҙҙе, мейеләребеҙҙе ялмап алһа, беҙҙең күҙҙәребеҙгә, ҡолаҡтарыбыҙға, телдәребеҙгә ҡалҡан булып әүерелһә, беҙҙең өсөн бар ҡурҡыныстар юҡҡа сығыр, аҙашыуҙар, яңылышыуҙар артта ҡалыр! Һәм Аллаһы Тәғәлә беҙҙең тәндәребеҙҙе тамуҡ өсөн харам ҡылыр. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "О Муаз! Лә иләһә илләллаһ, Мөхәммәдү рәсүлүллаһ, тип шаһитлыҡ килтергән һәр кемде Аллаһы Тәғәлә тамуҡ уты өсөн харам ҡылыр", - тип.

Нимә аңлата ул "Лә иләһә илләллаһ"? Аллаһтан башҡа табынырға лайыҡлы һис бер илаһ юҡ, тигәнде. Ошо була ла инде тәүхид, һәм һәр мосолман быны белергә, өйрәнергә тейеш!

"Бел: Аллаһтан башҡа табынырға лайыҡлы илаһ юҡ! Үҙеңдең гонаһыңды, иманлы ирҙәр һәм ҡатындарҙың гонаһтарын ярлыҡауҙы һора! Аллаһ һеҙҙең ҡайҙа ни эшләп йөрөгәнегеҙҙе лә, ҡайҙа барып тыныслыҡ табыр урынығыҙҙы ла белә" (Ҡөрьән, "Мөхәммәт" сүрәһе, 47:19).

# ГОНАҺТАН АРЫНЫУ

Рамаҙан - мосолман календарының туғыҙынсы айы. Күптәр Рамаҙан айын ураҙа тотоуға ҡайтып ҡала тип кенә аңлай. Тик был изге айҙа кешеләр, көндөҙ ашауҙан баш тартыуҙан тыш, бик күп башҡа изгелектәр ҙә ҡылырға тейеш. Рамаҙан "яныу" тигәнде аңлата. Сөнки был айҙа ураҙа тотҡан һәм тәүбә иткәндәрҙең гонаһтары янғандай юҡҡа сыға.

Ураҙа - Исламдың биш шартының береһе. Тимәк, үҙен мосолман тип һанаған һәр кем ураҙа тоторға тейеш. Әлбиттә, күптәр: "Ураҙаның мәғәнәһе нимәлә икән һуң, ашамай тороуыбыҙҙан Хоҙай тәғәләгә ни файҙа?" - тигән һорау бирер. Хоҙай Тәғәләнең беҙҙең ашау йәки ашамауға мохтажлығы юҡ. Ғөмүмән, Ул бер нимәгә лә мохтажлыҡ кисермәй, ураҙа беҙгә генә кәрәк. Шуны ғына беләйек - Аллаһы Тәғәлә бәндәләрҙе файҙалы эштәр башҡарырға саҡырыр, насарлыҡтарҙан алыҫ торорға ҡушыр. Тимәк, ураҙа тотоуҙың файҙаһы хаҡында фекер йөрөтөргә кәрәк. Ураҙа тотоу йәшерен бер ғибәҙәт булһа - тағы ла яҡшыраҡ.

Иң тәү сиратта, ураҙа тотоу нәфсене еңергә өйрәтә. Юҡҡа ғына "ураҙа" менән шайтанды ла еңеп була" тип әйтмәгәндәр, ә шайтан беҙҙең нәфсене уятыусы дошман бит инде. Ас ҡайғыһын туҡ белмәй - ә көнө буйы ашамай йөрөгән кешенең күңелендә фәҡирҙәргә ҡарата йәлләү, аңлау тойғоһо уянасаҡ. Бынан һуң кеше изгелектәрҙе күберәк эшләргә тырышасаҡ, ә был инде уның үҙенә лә ҙур файҙа. Ысынлап та, ураҙаның файҙаһы бик күп, мәҫәлән:

1. Ун бер ай дауамында эшләгән ашҡаҙан һәм уға бәйле булған ағзалар ял итер һәм сихәт-сәләмәтлеккә юл табыр. Тәндә тупланған көс ҡеүәтләнер.

2. Ураҙалы кеше ҡыҙмаҫ, кеше күңелен ҡырмаҫ, һис кемде, хатта хайуандарҙы ла рәнйетмәҫ. Йылмайып ҡына торған кеше тирә-яҡтағыларға тик бәхет кенә өләшер.

3. Ураҙа ризыҡты киңәйтер, аҡса һәм малды арттырыр.

4. Ғәйбәт һөйләүселәрҙең дә, тыңлаусыларҙың да гонаһтары уртаҡ, шуға ла Рамаҙан айында ошо гонаһтан йыраҡ торолор. Ураҙаң ҡабул булһын өсөн игелекле булырға, кешене ҡыйырһытмаҫлыҡ һүҙҙәр генә һөйләп йөрөргә кәрәк.

5. Ифтарға туғандарыңды, дуҫтарыңды саҡырыу менән дуҫлыҡ, ҡәрҙәшлек ептәре ҡеүәтләнер.

Ҡыҫҡаһы, ураҙа тотоуҙың файҙаһы икһеҙ-сикһеҙ, ул тәнде лә, йәнде лә таҙарта, дауалай торған ғәмәл.

Ураҙаны аҡылы теүәл, тәне һау-сәләмәт бөтә мосолмандар ҙа тоторға тейеш. Ниндәйҙер сәбәп менән берәй көн ураҙағыҙҙы ҡалдырырға тура килһә, был көн өсөн һуңынан тотоп ҡуйырға мөмкин. Рамаҙан айы матур байрам - Ураҙа ғәйете менән тамамлана.

### *Ураҙаға ниәт һәм ифтар доғаһы*

Ураҙаның бер шарты - йылына бер тапҡыр ай дауамында көндөҙ ашау һәм эсеүҙән туҡталып тороу. Ураҙа тотоу өсөн иртән тороп ашаған ризыҡҡа "сәхәр", ураҙаны асыуға "ифтар" тиҙәр. Түбәндәге доғалар ураҙа тотҡан кеше өсөн мотлаҡ уҡылырға тейешлеге.

### *Сәхәр ашағандан һуң түбәндәге доға уҡыла:*

Ҡояш ҡылҡырҙан ике сәғәт алда, сәхәр ашын ашағандан һуң, фарыз ураҙаны тотоу өсөн ошондай ниәт ҡылына:

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.

Нәүүәйтү ән әсумә шәһри рамаҙанә минәл-фәжри иләл-мәғриби халисәл-лил-ләһи тәғәлә. Аллаһу әкбәр.

Мәғәнәһе:

"Аллаһы Тәғәлә өсөн тип таң атҡандан башлап байығанға тиклем ихласлыҡ менән ураҙа тоторға ниәтләнем. Аллаһ - Бөйөк".

### *Ауыҙ асҡанда уҡый торған доға:*

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим.

Аллаһүммә ләкә сумтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүккәлтү үә ғәлә ризҡикә әфтартү үә лисауми ғадим мин шәһри рамаҙанә нәүәйтү фәғ-фирли мә ҡалдәмтү үә мә әххартү.

Мәғәнәһе:

"Әй, Раббым! Һинең ризалығың өсөн генә тип ураҙа тоттом. Һиңә генә иман килтерҙем.

Эштәремде тик Үҙеңә генә тәүәккәлләйем. Һин биргән ризыҡ менән ауыҙ астым, иртән тағы ла ураҙаға инергә ниәт иттем. Эй, гонаһтарҙы ярлыҡап ҡына тороусы Аллаһ, үткәндә эшләгән гонаһтарымды ла, эшләү ихтималы булһа, киләсәктәгеләрен дә ғәфү ит!".

Шиғри тулҡында

## 9 МАЙ

*9-сы Май - Еңеү көнө*
*Кемдәр уны алып бирҙеләр?*
*Кемде еңдек - ниндәй байрам,*
*Беләме һуң килгән быуындар?*
*Немец ниңә беҙгә һөжүм иткән?*
*Ашарына әллә бөткәнме,*
*Балалары йәтим интеккәнме,*
*Ҡайғылары күлдәк юҡлыҡтанмы?*
*Вайымһыҙлыҡ, битарафлыҡ*
*Биләп алған немец халҡын да.*
*Хөкүмәткә фашист*
*башлыҡ булған*
*Гитлер тигән яһил зат*
*Бөтөн нигә хужа булып*
*Ултырырға уның "планы",*
*Рәсәй халҡын еңеп ҡол итергә*
*Хыял иткән Гитлер дарманы.*
*Күп милләтле Рәсәй халҡы*
*Күтәрелгән илен һаҡларға,*
*Балаларын, тыуған илен һаҡлап*
*Ятып ҡалған атай, бабайҙар.*
*Йәтим үҫте һуғыштан һуң*
*Күпме ағай, апай, әсәйҙәр...*
*Ер һөрҙөләр егелеп һабанға,*
*Заводтарҙа йәшниктәргә баҫып*
*Снарядтар ҡорҙо балалар.*
*Балаларҙың бала сағын алған,*
*Атайҙарын алған мәңгегә*
*Булһын ләғнәт фашистарға.*
*Аяманы бала сағаны,*
*Атты, аҫты, утта яндырҙы.*
*Әммә рухыбыҙҙы һындыра алманы.*
*Күпме ҡайғы хәсрәт килтерҙе.*
*Илебеҙҙе талап, малыбыҙҙы*
*Оҙатты ул килгән еренә...*
*Бөгөн бәйрам, Еңеү көнө,*
*Алайыҡсы иҫкә шаһиттәрҙе,*
*Ҡөръән аяттары уҡып*
*ҡылайыҡсы доға*
*Рухтары тулһын шатлыҡҡа!*
*Илен һоҡлап, ерен һаҡлап*
*Йәнен физа ҡылған яу ҡырында -*
*Эләгер, ти, Ҡөръән "йәннәткә".*
*Булайыҡсы берҙәм, һәр эштә лә*
*Күрмәйексе бүтән аһ-зарҙы*
*Булһын байрам һәр көндә лә*
*Эштә, уҡыуҙарҙа, хеҙмәттә.*
*Байрам итәйексе, яҙ байрамын*
*Күңелебеҙ тулһын шатлыҡҡа.*

**Әҙәүәт ҒӨБӘЙҘУЛЛИН** хәҙрәт.
**Салауат районы**
**Ҡарағоя ауылы.**

## ДҮРТ ИНӘ

**Мөхтәр ШАХАНОВ,** ҡаҙаҡ шағиры

*Яҙмышыңды тамырһыҙлыҡ сырхауынан ҡурсала,*
*Мәғәнәләр юҡта битарафлыҡ килеп сығыр уртаға.*
*Һәр әҙәмдең үҙ әсәһенән башҡа ла,*
*Ғүмере буйы мәңге арҡаһынан һөйөр,*
*Терәк булыр, таяныстай яҡлап йөрөр,*
*Ҡөҙрәтле дүрт инәһе булһын тиер:*
*ТЫУҒАН ЕРЕ - төп ҡаҙығы, иң ҙурыһы,*
*ТУҒАН ТЕЛЕ - мәңгелек тәрбиә рухы,*
*ЙӘН БАЙЛЫҒЫ, ҒӨРӨФ-ҒӘҘӘТ - терәге,*
*Аҙымына тик яҡтылыҡ түшәне,*
*Һәм дә уның ТУҒАН ТАРИХЫ -*
*Бәндә шул тарихтың вариҫы*
*Ауыр үә хәсрәтле булһа ла.*
*Ҡөҙрәт юҡ дүрт инәгә тиң булған,*
*Унһыҙ аңың ҡамғаҡ төҫлө юғалған.*
*Инәнең ололоғон танымағандар -*
*Дүрт инәһен түбәнһеткән бәндәләр.*
*Дүрт инәнән ышаныс таба алмаған*
*Тамырһыҙҙың башы ҡайҙа ҡалмаған!*
*Дүрт инәһен хөрмәтләмәгән халыҡтың*
*Һис ҡасан да ҡот йондоҙо янмаған.*
*Иң ҡәҙерле был дүрт инәй - яҙмышыңдың һулышы,*
*Дүрт инә өсөн булған көрәш - көрәштәрҙең олоһо!*

**Башҡорт теленә тәржемә иткән Мерей Ерсайын улы.**